10 - сы класс уҡыусылары өсөн

башҡорт теленән

контроль эш тексы

**Сәйәхәт**

Кешеләр сәйәхәт өсөн ишәк, ат, дөйә,фил, машина , карап,самолетты файҙалана.Сәйәхәткә йәйәү ҙә сығалар.

Кеше йәйәү сәғәтенә 5-6 км юл үтә. Ишәк менеп барғанда уның тиҙлеге сәғәтенә 10 км була. Эҫе яҡтарҙағы ҡомло насар юлда дөйә менән сәғәтенә 20 км юл үтә ала. Аттар шәберәк йөрөй. Англиялағы бер ат ,мәҫәлән, 1 минутта бер км юл үтә алған. Был сабып барыу була. Сәйәхәттә сабып түгел,ә әкрен, көстө һаҡлап йөрөйҙәр.

Хәҙер төрлө ҡалаларға, илдәргә сәйәхәткә күп сығалар. Был саҡта кешеләр машина , автобус, карап һәм самолеттарға ултыра.Улар күп кешене һыйҙыра һәм тиҙерәк алып бара.

Киләсәктә кешеләр сәйәхәт иткәндә ракеталарҙы, космос караптарын файҙаланыр,тип иҫәпләй ғалимдар. (103 һүҙ.)